**ЗАЯВКА**

| |
|---|
| Фамилия, имя, отчество (полностью)<br>**Хадимуллина Рамзиля Рафатовна** |
| Ученая степень, звание |
| Должность, кафедра (без сокращений)<br>**Учитель башкирского языка и литературы** |
| Если студент, Ф.И.О. научного руководителя, должность, кафедра без сокращений, ученая степень, ученое звание |
| Место работы (учебы)<br>**МБОУ СОШ им.дважды Героя Советского Союза М.Г.Гареева, с. Бишкураево, МР Илишевский район Республики Башкортостан** |
| Адрес рабочий<br>**452268 Республика Башкортостан Илишевский район с. Бишкураево. Ул. Ленина,26** |
| Телефон рабочий<br>**8(34762) 47-1-26** |
| Телефон домашний, мобильный<br>**8(34762) 47-1-49** |
| E-mail<br>k.ramzilya@hotmail.com |
| Название секции<br>**11. Вопросы экологии в гуманитарных науках.** |
| Тема статьи<br>**«Бережное и разумное отношение к природе спасет её для будущих поколений.»** |
| Количество страниц<br>**4** |
| Сумма доп.услуг, (если такие имеются) |
| Общая сумма и дата оплаты<br>**670 руб. 8.03.2019** |
| Дата, подпись<br>**8.03.2019. Хадимуллина Рамзиля Рафатовна.** |

***Р.Р.Хадимуллина**, учитель башкирского языка и литературы МБОУ СОШ им. дважды Героя Советского Союза Мусы Гайсиновича Гареева с. Бишкураево, МР Илишевский район РБ.*

**Бережное и разумное отношение к природе спасет ее для будущих поколений.**

Аннотация.

Формирование у школьников системы знаний об особенностях природы родного края осуществляется на уроках гуманитарного цикла, в том числе на уроках башкирского языка и литературы. Данная тема является наиболее объемной по содержанию и изучается на протяжении многих лет. Все мероприятия по изучению родного края приурочены к одной важной теме “Сохранение природы родного края”. Учитель должен уделять основное внимание региональным особенностям окружающей природы. Нужно развивать интеллектуальные и эмоциональные сферы учащихся и развивать интерес к познанию окружающей природы, направить на становление личности, деятельность которой во взрослой жизни будет сконцентрирована на развитие и процветание родного края. Формировать представление об экологических проблемах родного края, а так же представление о том, что состояние здоровья человека зависит от состояния окружающей среды и собственного поведения. Содержание краеведческого материала имеет четкую экологическую направленность, т. е. включает сведения о взаимосвязях в природе, о позитивном и негативном влиянии человека и возможных воздействиях учащихся на природу. Весь воспитательный процесс подрастающего поколения должен быть в духе патриотизма и любви к родной природе.

**Тәбиғәтте һаҡлау – изге бурысыбыҙ.**

Элек-электән башҡорт халҡы тәбиғәтте үҙ йорто һанаған, үҙен тәбиғәттән башҡа күҙ алдына ла килтермәгән. Бер ваҡытта ла ул үҙенең киләсәге, балалары йәшәйәсәк тәбиғәтте бысратыу тураһында уйлап та ҡарамаған. Сүп ташлау, һыулыҡтарҙы бысратыу түгел, киреһенсә, уларҙы таҙа тотоу уларҙың төп маҡсаты булған. Ауылдың өлкән кешеләре эсәр һыуҙар эргәһендә көтөү йөрөүҙе, төрлө хужалыҡ эштәре:кер сайҡау, мал эсәген йыуыуҙы тыйған. Был йәһәттән башҡорттар йәшәү сығанағы булған һыулыҡтарҙы, шишмәләрҙе изгеләштергән. Бөтә донъяға билдәле башҡорт халыҡ эпосында ла бит Урал батырҙың халыҡҡа изгелеге һыу менән бәйле. Борон-борондан халҡым тәбиғәтте ололаған, уның сикһеҙ ҡеүәтенә иман килтергән, тәбиғәт мәрхәмәтен, изгелеген ихлас теләгәндәр. Ер-әсәгә орлоҡ сәскәндә ергә шатлыҡ, бәхет килһен, донъялар имен булһын ине, беҙ шатлыҡ-ҡыуаныс менән йәшәһәк ине, тигән теләктәр теләгәндәр. Башҡорт халҡының тәбиғәттәге һәр ҡошҡа, ағас-үләнгә үҙенең ҡарашы, мөнәсәбәте булып, уларҙың культы йәшәгән. Кешеләрҙе уратып алған тәбиғәт, ҡош-ҡорт, хайуандар, үҫемлектәр, кеше, уның тормошо, рухы бер бөтөн итеп ҡаралғанын бөгөн һаҡланып ҡалған төрлө ырыу тамғаларында күрәбеҙ.Был йола, күренеш боронғо ата-бабаларыбыҙҙың тәбиғәтте, хайуандар, үҫемлектәр, кешеләр донъяһын бер итеп ҡабул итеүҙәренән килә тип аңларға була, кешеләр ошо хаҡта рухтарына, тамғаларына беркетеп ныҒыҡтандар.Бындай ҡараш башҡорт халыҡ ижадында киң сағылыш тапҡан. Башҡорт әҙәбиәте дәрестәрендә халыҡ ижадына ҙур урын бирелә. Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтары, экиәттәре тәбиғәт темаһына бай материал бирә. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәренең бер нисәһенә генә туҡталайыҡ: “Саф һауа-тәнгә дауа”, “Андыҙ барҙа ат үлмәҫ”, “Йәйҙең өйө иркен”, “Ямғыр яуһа-ергә май”, “Эскән һыуыңа төкөрмә” һәм башҡа бик күп мәҡәлдәрҙә халыҡтың аҡылы, тәжрибәһе ятҡаны күренә.[ 1;4]

Тәбиғәтте, ҡош-ҡорттарҙы, үҫемлектәрҙе һүрәтләүсе башҡорт йомаҡтарының күплеге, тапҡыр мәғәнәле булыуы халыҡтың үҙе йәшәгән донъяны ни тиклем белергә, төшөнөргә, тәрән аҡыл, тәжрибә тупларға ынтылыуын иҫбатлай. Башҡорт йомаҡтары тәбиғәт күренештәре, күк еҫемдәре, ерҙәге бөтә төр хайуандар, бөжәктәр, ҡыяҡ-үләндәре хаҡындафекер йөрөткән, тасуирлау тапҡан:

Иртә менән сыға, кисен юғала.

Уның урынына иптәше ҡала.

(Ҡояш, ай)

Ағас бөгә, ҡулы юҡ, йөрөй торған юлы юҡ.

Асыуланһа-һыҙғыра, туҙандарҙы туҙҙыра.

(Ел)

Үҫә ҡойма буйында, гел сағыуҙыр уйында.

Уты ла юҡ-яндыра, ҡорт саҡҡан эҙ ҡалдыра.

(кесерткән)

Алда һанап үтелгән халыҡ ижады ынйылары төрлө үткәрелгән кластан тыш сараларҙың асылын тәшкил итә.Мәҫәлән,"Кәкүк сәйе", "Ҡарға буҡкаһы", "Йәйге нардуған байрамы". Нардуған байрамын ошондай шиғыр юлдары менән башлап китәбеҙ:

Әйҙә сығайыҡ яланға

Нардуғанға, байрамға...

Шатланышып уйнайыҡ,

Йоланы беҙ боҙмайыҡ:

Үләндәрҙе, сәскәләрҙе

Тапамайыҡ, өҙмәйек.

Гөл-сәскәләр атҡан мәл-

Иң матур аяу айы.

Тыуған йортобоҙ – тәбиғәт,

Ярлыланма, үҫ, байы.

Был байрамда ошолай итеп тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, дан йырлана.

"Сәскәләр байрамы" уҡыусыларҙа сәскәләргә ҡыҙыҡһыныууятыу, матурлыҡҡа битараф булмау, күҙәтеүсәнлек һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү маҡсатынан ойошторола. Күп сәскәләрҙең дарыу үләндәре булыуы ла иҫкәртелә.Балаларҙы шифалы үҫемлектәрҙе айыра, таный, йыя һәм һаҡлай ҙа белергә өйрәтеү зарур. [2;1]

Башҡорт халҡының тәбиғәткә, уның үҫемлектәренә, хайуандарына ҡарата ихтирамлы, миһырбанлы ҡарашы, һаҡсыл мөнәсәбәте Уралдың хозур тәбиғәтенең – уның тәбиғи байлыҡтары, һоҡланғыс йылға-күлдәре, серле мәмерйәләренең һаҡланыуына килтергән. Юҡҡамы ни урмандарының аяуһыҙ киҫелеүенә, тау-таштарының рәхимһеҙ аҡтарылыуына сыҙамай яуға сыҡҡан башҡорт. Бөгөнгө көндә ҡомартҡы итеп иғлан ителгән Шихантауҙарҙың да яҙмыштары бик шәптән түгел, үҙҙәренә тиңе булмаған тауҙар сырье сығанағы ғына итеп ҡарап, әләф-тәләф ителә, фәнни әһәмиәтен юғалта, башҡорт халҡының ҡомартҡыһы булараҡ юҡҡа сығарыла. Шихандарҙың береһе – Торатау. Уның бейеклеге 275 метр. Тауҙың бер яғында мәмерйәһе лә булған. Боронғо башҡорттар тау башына менеп байрамдар, йыйындар үткәрә торған булғандар. Торатау – ул боронғо башҡорттарҙың нығытылған ҡәлғәһе – крепосы булыуы менән дә әһәмиәтле. Шихандарҙы мотлаҡ һаҡлау кәрәклеге менән халыҡ республика етәкселегенә мөрәжәғәт менән сыҡты. Был эш урынынан ҡуҙғалды. Бөгөнгө көндә уҡыусыларҙы таныштырыу, аңлатыу эштәрен алып барыу һәр уҡытыусының бурысы тип һанайым мин. Республикала йәшәгән һәр кеше үҙ иленең, еренең яҙмышына битараф булмаҫҡа тейеш .[3;8]

Уҡыусыларға башҡорт теленән яҙҙырған яҙма эштәрҙе лә Башҡортостан тәбиғәтенә арналғандарын һайлап алыуҙы ҡулай күрәм. Инша темалары, диктанттар тел уҡытыусыһы тарафынан ныҡлы уйланылған булырға тейеш. Тәбиғи ҡомартҡылар тураһында ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле материалдарҙы "Башҡортостан ҡомартҡылары", Рәшит Шәкүрҙең "Ерҙәң хәтер китабы" баҫмаларынан, көндәлек матбуғаттан табырға мөмкин.

Ауылдар тирәһендәге ер-һыу атамаларын йыйыу тигән методик тема өҫтөндә эшләйем. Ер – һыуҙарыбыҙҙың, тау-таштарҙың, йылға-күлдәрҙең, шишмә-инештәрҙең, ауыл-ҡалаларҙың халыҡ теле, халыҡ хәтере өсөн үҙ исеме, үҙ атамаһы бар. Күҙ алдында үҙенең әллә күпме хикмәттәре менән асылып киткән исемдәр була. Уларҙың берәүҙәре туған телдең ынйы бөртөктәре кеүек балҡыуы, икенселәре үткән замандарҙың шанлы ваҡиғалары саҡҡыларын һаҡлауы менән ҡиммәтле. Ә тыуған ер матурлығы, туған

тәбиғәттең мең төрлө төҫтәре һәм үҙенсәлектәре, ҡоштар, хайуандар донъяһы ер-һыу атамаларында, йәғни топонимияла ни тиклем киң һәм сағыу сағылыш таба.

“ Топонимия, дөйөм алғанда, ил һәм халыҡ тормошо, ер һәм тәбиғәт донъяһы тураһында энциклопедик мәғлүмәттәр һаҡлаусы ғәжәйеп бер сығанаҡ ул. Был сығанаҡты, һис икеләнмәйенсә, ерҙең хәтер китабы тип атарға була”, - тип яҙҙы топонимист Рәшит Шәкүр. [4;9]

Илде, тарихты , тәбиғәтте белеү өсөн ер-һыу атамаларының барыһын да – боронғоларын да, һуңғыраҡ осорҙа барлыҡҡа килгәндәрен дә йыйыу әһәмиәтле. Быны белгестәр генә эшләп бөтә алмай, беҙҙең дә ярҙамыбыҙ кәрәк.Башҡортостандың һәр ауылынан бер генә уҡыусы үҙ ауылы тирәһендәге ер-һыу атамаларын яҙып ҡуйһа, тикшеренеү үткәрһә, тиҙ арала бик ҙур ғилми байлыҡ тупланыр ине. Быдай материал фән, тарих, киләсәк быуындар өсөн файҙалы бер эш булып хеҙмәт итер. Был йәһәттән ауылдарҙың тарихын ,ер-һыу атамаларын өйрәнеү буйынса ғилми – тикшеренеү эштәрен ойоштороу отошло тип һанайым . Уҡыусылар “Ауылым шишмәләре”, “Бишҡурай ауылының ер-һыу атамалары”, “Беҙ тарихта эҙлебеҙ”, “Йылға – һыулыҡтарҙың экологик торошо” тигән темаларға конференцияларҙа даими рәүештә сығыш яһайҙар.

Ағас ултыртыу башҡорт өсөн изге бурыс һаналған.Бер ағас ҡырҡһаң, икене ултырт, тигән васыят әйткәндәр балаларына.Элекке ваҡытта самаһыҙ үлән тапау, емеш ағасын балта менән ауҙарыу кеүек ҡырағай ҡылыҡтар халыҡта булмаған. Өлкән инәйҙәр еләккә барғанда ейәндәрен эйәртеп алып барғандар, аҡыл өйрәтә-өйрәтә йөрөгәндәр. Ботаҡ һындырып муйыл тиреү, сабынлыҡ тапап еләк йыйыу, шифалы үләндәрҙең тамырынан йолҡорға ярамағанлығын бала бәләкәйҙән белгән. Бөгөнгө вәхшилекте өлкән инәй, бабайҙарыбыҙ күрһә, ниндәй ҡырағайлыҡ, тип иҫтәре китер ине. Мәктәптәрҙә тәрбиә эшен халыҡ педагогикаһына нигеҙләнеп башҡарһаҡ дөрөҫ булыр ине, сөнки өлкән быуындың тәрбиә ҡанундары тормошсан, һыналған һәм нәтижәле.[5;10]

Ауылдарыбыҙҙа үткәрелгән экологик өмәләрҙә мәктәп уҡыусылары әүҙем ҡатнаша. Йылға, быуа буйҙарын сүп-сарҙан таҙартыу, ағас ултыртыу эштәре ойошҡан төҫтә башҡарыла. Шуныһы ҡыуаныслы, ирекмәндәр отрядына ингән балаларҙың хәстәрлекле эшсән ҡулдары бик күп эштәр башҡаралар. Ҡоштарға ярҙам итеү ҙә матур ғына ойоша мәктәптә. Ҡышын тағараҡтар, яҙын сыйырсыҡ оялары яһап элеү традицияға инде. “Иң матур оя” тигән конкурстарҙың ойошторолоуы был эштәргә ҡыҙыҡһыныу уята.

Тағы ла бер мөһим тема- был экологик яҡтан таҙа ашамлыҡ менән туҡланыу. Һуңғы йылдарҙа кешеләр күберәк магазиндан һатып алынған, төп составын консерванттар тәшкил иткән аҙыҡтарға өҫтөнлөк бирәләр. Туҡланыу культураһы ла түбән төштө. Был еңел-елпе, аяҡ өҫтө ҡоро-һары ҡапҡалау – төрлө ауырыуҙарҙы – эсәк, аш ҡаҙаны сирҙәрен килтереп сығарҙы.

Борондан башҡорт халҡы ит, һөт ризыҡтарына өҫтөнлөк биргәндәр. Был ризыҡтарҙы әҙерләүҙең төрлө ысулдарын белгәндәр. Ризыҡтарҙы киптереү, тоҙлау, ҡаҡлау, әсетеү кеүек ысулдар киң таралған. Ҡайһы берҙәре башҡорттарҙың данын сит илдәргә лә тараҡҡан . Шундайҙарҙың береһе – ҡымыҙ. Ҡымыҙ бейә һөтөнән яһала. Ул туҡлыҡлы, тәнгә сихәтле эскелтем эсемлек. Башҡорт иленә ҡымыҙ эсеп дауаланырға ситтән дә килгәндәр. Шундайҙарҙан күренекле рус яҙыусыһы Л.Н.Толстой, А.П.Чехов, Ғабдулла Туҡайҙы әйтеп үтәргә була. Улар ҡымыҙҙан, саф һауанан сихәт алғандар, башҡорт халҡының ихласлығын, ҡунаҡсыллығын оҡшатҡандар. Тағы ла халыҡтың төп туҡланыу ризығы булып ит һаналған, йылҡы ите бигерәк тә күп ашалған. Бишбармаҡ өсөн итте, ҙур-ҙур киҫәкләп, талғын утта ҡайнатып бешергәндәр. Бешеп еткән ит һурпанан алынып, өлөштәргә бүленгән, ҡаҙанда тороп ҡалған шурпаны икегә бүлеп, береһендә һалманы бешергәндәр, икенсе өлөшөн , ҡоротлап-борослап, бишбармаҡты ашағандан һуң эсергә биргәндәр.

Табын йәме ашта ғына түгел, һүҙҙә лә тигәндәр боронғолар. Аш янында әҙәпле булыу, урынлы һүҙ, мәҡәл-әйтемдәр хупланған. Һөт ризыҡтарынан ҡорот, күбек майы, эремсек аш ҡаҙаны ауырыуҙарына ҡаршы торған. Талҡан, ҡурмас тигән байрам аштары булған. Сөсө икмәкте йыш бешергәндәр. Еләк-емеште киптереп яһаған ҡаҡ, сейәле май, балан бәлеше сәй табындарын биҙәгән. Бына ошондай тәбиғи аҙыҡтарға өҫтөнлөк биргәндә генә киләсәк быуындарыбыҙ таҙа, һау-сәләмәт булырҙар. [6;3]

Тәбиғәттә һәр нәмә үҙ урынында. Улар бик тә кәрәк, файҙалы эш башҡара. Шулай булғас, был донъяла нимә ҡайһылай бар булған – шулай һаҡланырға тейеш. Тауҙары ла, йылғалары ла, балыҡтары ла..

Һыуҙарыбыҙ таҙа, һауаларыбыҙ саф, күктәребеҙ аяҙ, болон-туғайҙарыбыҙ иркен, сәскәле, емешле, йылғаларыбыҙ тәрән, мул һыулы һәм балыҡлы, тупрағыбыҙ уңдырышлы, урмандарыбыҙ бай булғанда ғына кешеләр сәләмәт, тулы ҡанлы тормош алып бара ала. Әгәр инде һыу төптәре тулы быяла ватыҡтары, үлән аралары тулы сүплек, һыуҙарыбыҙ тынсыу, балыҡтарыбыҙ ағыулы булһа, кеше нисек йәшәһен. Ауылдарыбыҙҙа сүп түгеү урындары билдәләнде. Ләкин кешеләр быға яуаплы ҡарарға өйрәнмәгән әле. Сүптәрҙе сорттарға бүлеп һалыуҙы ла кәрәк тип һанамай. Боронғо бабаларыбыҙ тиреҫте фәҡәт ашлама өсөн ҡулланғандар, янған тиреҫтән сәмән һуҡҡандар. Был эштәрҙе башҡарғанда “тәбиғәтте һаҡларға кәрәк” тип уйлап эшләмәгәндәр, ә шулай тейеш тип уйлағандар. Кеше үҙе уйлап сығарған заманса ҡоролмалар тәбиғәт өсөн бик зыянлы. Ҙур завод-фабрикаларҙың ҡалдыҡтары эсәр һыуҙарыбыҙҙы бысрата.... Бына ошондай бик күп проблемалар тураһында уҡыусыларҙы уйландырыу, тәбиғәт менән кеше араһындағы бәйләнеште өҙмәҫкә саҡырыу мәктәптә тәрбиә эшенең төп маҡсаты булып торорға тейеш. Йыһан тигән төп йортобоҙға ярҙам итеү өсөн хәстәрлекле ҡулдар тәрбиәләү ғаиләнән һәм мәктәп эскәмйәһенән башланырға тейеш.

Ата-әсәләр, мәктәп, йәмәғәтселек ҡулға –ҡул тотоноп, берҙәм эшләп, үрнәк күрһәткәндә генә балалар тәбиғәтте һаҡлауҙың ни ҡәҙәр кәрәкле булыуын күреп үҫәсәктәр. Һәр быуын, өлкәндәр кәңәшенә ҡолаҡ һалып, ололар аҡылын тотоп эшләгәндә, йәшәгәндә генә ниндәй генә ҙур проблемалар килеп тыуһа ла, хәл итә аласаҡ. Килер быуындар алдында йөҙөбөҙ яҡты буласаҡ. Тәбиғәтте һаҡлау-беҙҙең изге бурысыбыҙ.

Ҡулланылған әҙәбиәт һәм ҡулланма әсбаптар исемлеге.

1. Башҡорт халыҡ ижады томдары.
2. Р. Өмөтбаев. Башҡорт халыҡ яҙмышы тураһында ҡайһы бер фекерҙәр. “Башҡортостан”гәзите.
3. Д.Вәлиев. Башҡорт халҡының әхләҡ культураһы: үткәне һәм хәҙергеһе. Өфө. 1989.
4. С.Ғалин. Башҡорт фольклоры. Өфө. Китап.
5. Р.С.Ғайсина. Башҡортостан тәбиғәте. Өфө-2009. “Китап”
6. Башҡортостандың тәбиғәт һәйкәлдәре. Өфө-1995. “Китап”
7. Ғ.Хөсәйенов. Быуаттар тауышы. Өфө-1984.
8. Шамов Д.Ф.Стәрлетамаҡ шихандары.Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте. 1971.
9. Р.Шәкүров. “Ерҙең хәтер китабы”.Өфө-1984.
10. М.Б.Юлмөхәмәтов, И.Д.Бураҡаев, М.С.Бураҡаева. Тормош һабаҡтары.Өфө-1996. “Китап”